# Юлбарыҫтың юрғаны

Рәмилә Торомтаева




**Юлбарыҫҡа ни булған?**
**Ниңә иларға булған?**



**—Юғалды, — ти, — ҙур юрған,**
**Ябынып йоҡлай торған.**






# Юлбарыҫтың юрғанын

# Эҙләп-эҙләп тапманыҡ.




**Табалмағас юрғанды**

**Йоҡларға ла ятманыҡ.**

Юлбарыҫтың юрғаны
Әллә ҡайҙа юғалған.
Әйтерһең дә юрғаны
Бер ҡасан да
булмаған.






**Елгә осҡанмы әллә?**

**Һыуға аҡҡанмы әллә?**

**Бер януары яңылыш**

**Утҡа яҡҡанмы әллә?**



**Әйттек айыуға барып,**




Әйттек бүрегә барып,



**—Юлбарыҫтың юрғанын**

**Тиҙ(е)рәк бирегеҙ табып!**



# Килде айыу үкереп,



# Килде бүре екереп,




**Килде ҡуян һикереп,**

**Сәсәй-сәсәй төкөрөп.**



**Һоранылар алмашлап,**
**Көйгә һалып һалмаҡлап:**



# —Япраҡтанмы юрғаның?

# —Тупраҡтанмы



**Юлбарыҫ аптыраны,**

**Кәрәк нәмә таптырамы?**



**Юрғанһыҙ булмай мәгәр,**
**Өшөнө, ҡалтыраны.**




**Үҙе килде һығымта,**
**Табылмағас, эҙләп тә,**
**—Юлбарыҫта юрғандар,**
**Булдымы һуң, туғандар?**



Йыйылдылар хайуандар,
Һырттҡа ҡойроҡ һалғандар.
Юлбарыҫтан көлдөләр:
«Ниндәй юрған?» —тинеләр.



Ҡапыл тымды Юлбарыҫ,
Һораны ул ялбарып:
«Ҡойроғоммо юрғаным,
Йылы һаҡлай торғаным?»



**Баш ҡаҡтылар хайуандар,**

**«Иҫәр икән,һин, януар.**

**Яҫтыҡ— беҙҙең ҡолаҡтар,**

**Юрған —беҙҙең**

**ҡойроҡтар.»**